# Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарары

2002 йыл, 15 ғинуар №10

## *Икенсе Бөтә донъя башҡорттары королтайын үткәреү тураһында*

Башҡортостан Республикаһы Президентының 2001 йылдың 28 декабрендәге «Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреү тураһында» УП-653-сө Указын үтәү йөҙөнән Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарар итә:

1. 2002 йылдың 10-11 июнендә Өфө ҡалаһында Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын (артабан - Ҡоролтай) үткәрергә.
2. Ҡоролтайға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика ойоштороу комитетының составын раҫларға.
3. Ҡоролтайға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика ойоштороу комитетына 2002 йылдың 15 февраленә тиклем Ҡоролтайға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса сараларҙың комплекслы планын һәм сығымдар сметаһын Башкортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетына раҫлауға тәкдим итергә.
4. Ҡоролтайға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика ойоштороу комитетына, Башҡортостан Республикаһының район һәм ҡала хакимиәттәренә Ҡоролтай эшендә ҡатнашыу өсөн райондарҙан һәм ҡалаларҙан башҡорт милләтенән булған вәкилдәрҙе күрһәтеү буйынса эш үткәрергә. Ҡоролтай делегаттарын һайлау буйынса район, ҡала, шулай уҡ төбәк конференцияларын үткәреүҙе 2002 йылдың 1 апреленә тиклем тамамларға.
5. Башҡортостан Республикаһы министрлыҡтарына, дәүләт комитеттарына, ведомстволарға, ойошмаларға, учреждениеларға, предприятиеларға, йәмәғәт берекмәләренә Ҡоролтайҙы ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә ярҙам күрһәтергә.
6. Башҡортостан Республикаһы Финанс министрлығына Ҡоролтайға әҙерлек һәм уны үткәреүҙе финанслау сығанаҡтарын билдәләргә.
7. Ошо ҡарарҙың үтәлешенә контролде Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Х.Х.Ишморатовҡа йөкмәтергә.

**Башҡортостан Республикаһы**
**Премьер-министры Р. И. БАЙДӘҮЛӘТОВ.**
**Башҡортостан Республикаһы**
**Министрҙар Кабинеты аппараты**
**етәксеһе Ф. М. ҠАҘАҠБАЕВ.**